***Ҡәҙим АРАЛБАЙ,***
***Башҡортостандың халыҡ шағиры***

# Ватандаштарыбыҙҙы онотмайыҡ



Әле XII быуатта географ һәм сәйәхәтсе әл-Идриси күргән һәм юлъяҙмаларында тасуирлаған “эске башҡорттар” һәм “тышҡы башҡорттар” тарих тирмәнендә тартылып, заманалар иләгенән иләнеп, күптән инде бер бөтөн этнос булып формалашып, төп өлөшө Көньяҡ Уралда йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, күп кенә милләттәштәребеҙ ситкә һибелгән: хәҙерге Татарстан Республикаһында, Пермь, Һарытау, Һамар, Ырымбур, Силәбе, Свердловск, Ҡурған өлкәләрендә — үҙҙәренең боронғо тарихи ерҙәрендә көн күрә. Аяуһыҙ ваҡыт үтеү менән күрше региондарҙағы ҡан-ҡәрҙәштәребеҙ, үкенескә була, ассимиляцияға бирелә, милли мәктәптәр ябылыу арҡаһында үҙ туған телендә уҡыу сикләнә, бөгөнгө йәш быуын башҡорт телендә һөйләшеүҙән мәхрүм була бара.

Башҡортостандан ситтә йәшәһәләр ҙә, асылда, бөтә башҡорттар ҙа — беҙҙең ватандаштарыбыҙ, уртаҡ Ватаныбыҙ — Рәсәй граждандары. Заманалар ауырлығына ҡарамаҫтан, ҡан-ҡәрҙәштәребеҙҙе онотмаһаҡ ине. Ә “Ватандаш” журналы — улар өсөн дә иң төп, иң кәрәкле матбуғат баҫмаһы бит. Журнал биттәрендә илебеҙҙең төрлө төбәктәрендә йәшәгән һәм хәҙер сит илдәрҙә тороп ҡалған милләттәштәребеҙҙең тормошон, рухи ихтыяждарын тулыраҡ һәм киңерәк сағылдырайыҡ.

“Ватандаш” журналы эшмәкәрлегенең төп йүнәлеше булып башҡорт халҡын үҙ илендә үҙенең бөгөнгө йәшәйешен дә, киләсәген дә үҙе хәл итә алырлыҡ, заманса үҫешкән, юғары мәҙәниәтле, көслө милләт кимәленә еткереү маҡсатына йүнәлтеп, милли менталитетын нығытыу торорға тейеш. Бөгөнгө ҡатмарлы, ҡиблалар юғалған, рухиәт ҡаҡшаған, болғауыр дәүерҙә халҡыбыҙға “Ватандаш” кеүек туплаусы, ойоштороусы, әйҙәүсе, берләштереүсе лидер баҫма бик кәрәк.